**Гөлнара Мостафина менән осрашыу кисәһе сценарийы.**

*...Минең хәҙер ҙә үҙ көйөм, үҙ моңом. Тирә-яҡҡа ҡарарға, кемдеңдер артынан эйәрергә ваҡытым юҡ, үҙемдең ғүмерҙе матур, иҫтә ҡалырлыҡ итеп йәшәгем килә. Башҡалар менән бер арбаға менеп ултырһам, улар һуҙған ғына йырға ҡушылһам, бөтәһе лә боролған яҡҡа әйләнеп, барыһы менән бергә аһ- уһ килһәм, ситкә ҡарарға бүтәндәрҙең ҡарашынан, ни әйтеренән ҡурҡһам, тормоштоң ҡыҙығы ҡалмаҫ төҫлө. Ә тормош шундай матур һәм һәр көнөм көтөлмәгәнлек менән тулы, барыһын да ҡабул итеп өлгөрөргә генә кәрәк...* Шулай тип яҙған беҙҙең бөгөнгө ҡунағыбыҙ Гөлнара апай Мостафина ”Китһәм дә мин, йырым ҡалыр...” повесында.

-Хәйерле көн, ҡәҙерле уҡыусылар, мәктәп коллективы, ҡунаҡтар! Һаумыһығыҙ, һүҙ ҡәҙерен белеүселәр, хәйерле көн һеҙгә, һүҙҙең бәҫен арттырыусылар! Бөгөн беҙҙә күркәм кисә.

Кешелектең йәшәү дәүерендә кешеләрҙең күңелендә нәфис әҙәбиәткә, шиғриәткә булған мөхәббәте һис ҡасан да һүрелмәй. Шиғриәт, ижад тип аталған бөйөк төшөнсәләр бөгөнгө болғансыҡ тормоштан күпкә юғары тора. Ана шул юғарылыҡта ҡалыу, әҙәбиәт менән кеше күңеленә йылылыҡ, рухи ныҡлыҡ биреүгә ынтылыш беҙҙе бөгөн осрашыу кисәһенә йыйҙы ла инде. Бөгөнгө кисәбеҙҙең төп ҡунағы - 3 китап авторы, «Шоңҡар” журналының өлкән мөхәррире, журналист, яҡташыбыҙ, Билал ауылы ҡыҙы Гөлнара Дамир ҡыҙы Мостафина. “Таш келәттең сере”, “Һағыҙаҡ балы” һәм күптән түгел генә “Искәндәр кисергәндәр” тип исемләнгән өсөнсө китабын баҫтырҙы ул. Тағы ла бер һөйөнөслө яңылыҡ-яңыраҡ ҡына Гөлнара Дамир ҡыҙы Яҙыусылар союзына ағза итеп алынды. Әйҙәгеҙ яҡташыбыҙ өсөн ғорурланып, уның менән бергә һөйөнөп, ҡул сабып алайыҡ.

*“Кеше күңелен мин төбө ваҡ ҡына тишекле көршәккә оҡшатам. Унда тамған шатлыҡ, бәхет, таҙа булғанлыҡтан, тишектән үҙенә юл ярып тамсылап тамып тора. Кире һыҙаттарыбыҙ: үпкәләү, көнләшеү, асыуланыу, ғәйепләү һ.б. иһә көршәккә йыйыла, йыйыла... һауыт тула барған һайын кеше үҙен насарыраҡ һиҙә, үҙен бәхетһеҙ тоя башлай. Күңелен таҙарындырмаһа, ауырыуға һабыша, уның менән бәхетһеҙлек осраҡтары йышая, Шуға күрә күңелдә тик таҙа уйҙар, изге ғәмәлдәр генә йыйылырға тейеш. Ғәфү үтенеүҙән тартынмайыҡ. Яңылыштан ғына берәйһен рәнйеттең йә насар уйланың икән, ихлас күңелдән ғәфү үтенеү (эстән генә булһа ла) күңелде таҙартыуҙың беренсе ысулы... Күңелегеҙҙә гел яҡтылыҡ йәшәһен!”* Былар ҙа Гөлнара апайҙың һүҙҙәре. КҮҢЕЛДӘРҘӘ ГЕЛ ЯҠТЫЛЫҠ ЙӘШӘҺЕН!” тап ошо һүҙҙәрҙе беҙ бөгөнгө осрашыуҙың исеме итеп алдыҡ. Был осрашыуҙан күңелдәр үҫеп, дәртләнеп, ҡанатланып таралышырға яҙһын.

Хөрмәтле ҡунағыбыҙҙы сәләмләп беҙҙең уҡыусыларҙан музыкаль сәләм... (бейеү)

Ә хәҙер мәктәбебеҙ менән таныштырыу өсөн һүҙ уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары Зәйнуллина Вәлимә Хәлфетдин ҡызына бирелә.
Гөлнара Дамир ҡыҙы Бөтә журналист, яҙыусылар кеүек үк, мәктәптә уҡыған йылдарҙа мәҡәлә, хикәйәләрен “Пионер” (хәҙерге “Аманат”), “Башҡортостан пионеры” (“Йәншишмә”) баҫмаларында, район гәзитендә баҫтырып тора. Билал урта мәктәбен тамамлағас, БДУ-ға уҡырға инеп, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштерә. Артабан Салауат районы егете Фларис Мостафинға тормошҡа сыға, балалар үҫтерәләр һәм ижад яйлап ҡына икенсе планға ҡала...

- Эйеме, Гөлнара апай? Һеҙҙе ҡабаттан ижад юлына, хикәйәләр, повестар яҙыуға нимә этәрҙе? Нисек һеҙ ижад эшенә тотондоғоҙ? *(Һөйләшеү)*
- Гөлнара Дамир ҡыҙы, ә китап баҫтырыу бөгөнгө заманда ауырмы? (Яуап)

-Һеҙҙең яҙғандарҙы иң тәүҙә кемдәр уҡып сыға? Тәүге тәнҡитселәрегеҙ кемдәр? (Яуап)
**Ә** хәҙер әйҙәгеҙ Гөлнара Дамир ҡыҙының хикәйәһен сәхнәләштереүҙе ҡарайыҡ.
*(“Әлфиә” хикәйәһен сәхнәләштереү.)*
Рәхмәт, уҡыусылар! Ә хикәйәнең аҙағын уҡып сыҡҡас белерһегеҙ.
Хәҙер һүҙҙе ауыл китапханасыһы Мәжитова Әнүзә Хажиәхмәт ҡыҙына бирәйек.
*... Бына, кешегә бәхетле булыр өсөн күп тә кәрәкмәй. Күңелеңә яткан, үзең яраткан эште башкарып, шуның емештәрен күреп һөйөнөп ултырыу үзе бер бәхет түгелме ни? Кеше кеше менән аралашып йәшәргә тейеш. Үзеңә бикләндеңме, һин үсешеүзән туктайһың.* (Гөлнара Мостафина. "Китһәм дә мин,йырым ҡалыр..." повесынан)
*Кешегә ғүмер көндәреңде илап, бушка үткәрер өсөн бирелмәгән икән. Мин был донъяға бәхетле булыр өсөн килгәнмен һәм ғүмеремде лайыҡлы итеп йәшәргә тейешмен!* (Гөлнара Мостафина. "Китһәм дә мин,йырым ҡалыр..." повесынан)
*...Әсәйем иҫемә килеп төштө. Ул да гел: “Бер үк кешегә асыу һаклап, үпкәләп йөрөмәгеҙ. Ғәфү итә һәм ғәфү үтенә белегеҙ. Шул мәлдә күңелегеҙ ҙә, йөҙөгөҙ ҙә якты булыр”, тиер ине.*
(Гөлнара Мостафина. "Китһәм дә мин,йырым ҡалыр..." повесынан)
*Яраткан эшең менән шөғөлләнгәндә генә һинең күңелең дә бөтөн, аксаң да етерлек буласаҡ. Шул ваҡытта ғына һин эшкә байрамға йөрөгән кеүек теләп, дәртләнеп йөрөйәсәкһең. Шунан да ҙур бәхет бармы ни? Күптәр бит үҙенә бирелгән һәләтте һанламай, икенсе юлдан киткән булып, тормош юлында үҙ- үҙен юғалта. Кемеһелер аҙаҡ урау-урау юлдар аша үҙен табырға мөмкин, әммә күптәре аҙашып әрәм була.*(Гөлнара Мостафина. "Китһәм дә мин,йырым ҡалыр..." повесынан)

-Былар бөтәһе лә Гөлнара апайҙың “Китһәм дә мин йырым ҡалыр...” повесынан алынды. Гөлнара апай! Бына ошондай матур, кешенең күңелен үҫтерерлек һүҙҙәрҙе һеҙ ҡайҙан табып бөтәһегеҙ?
(Яуап)
-Беҙҙең, уҡытыусыларҙың, төп маҡсаттарҙың береһе — китап уҡыуға йәлеп итеү. Һеҙҙең килеүҙе белгән шикелле беҙ уҡыусылар менән уҡыу йылы башынан алып дәрес аҙағында ҡалған ваҡытта, кластан тыш уҡыу дәрестәрендә һеҙҙең хикәйәләрҙе уҡыныҡ. Ихласлыҡ менән тыңланы уҡыусылар, өйҙәренә алып ҡайтып уҡыусылар ҙа булды, әйҙәгеҙ һүҙҙе уҡыусыларға бирәйек, һеҙҙең әҫәрҙәрҙең ҡайһыһы иң нығы уларға оҡшаған икән, уларҙың фекерҙәрен беләйек.
**Укыусыларҙың сығышы**
- “Дуҫлыҡ бүлешкәндән генә арта”, - тигән халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры М.Кәрим. Илһам да бүлешкәндән ишәйә. Шиғри йәнле, ижадҡа ғашиҡ кешеләребеҙ күберәк булған һайын донъябыҙ йәмлерәк, йәшәйешебеҙ ҙә ғәмлерәк була бара. Беҙҙең уҡыусыларҙың да “Аманат”, “Йәншишмә” “Йәшлек” “Һаҡмар” гәзиттәрендә ижад емештәре баҫылып тора. Хәҙер һүҙҙе ижадҡа битараф булмаған уҡыусыларға бирәйек, улар һеҙҙең килеүгә хикәйәләрен әҙерләнеләр.
**(У.Азалия, А.Нурзилә, К.Азалия.)**
-Уҡыусылар, һеҙҙең дә Гөлнара Дамир ҡыҙына әйтер һүҙҙәрегеҙ, һорауҙарығыҙ барҙыр. Ихлас күңелдән һеҙҙе тыңлайбыҙ.
**(Уҡыусылар һорауҙар бирә)**
-Ижад булған ерҙә йыр ҙа була. һеҙгә, хөрмәтле Гөлнара Дамир ҡыҙы, уҡыусыларыбыҙҙан тағы бер бүләк был матур йырҙы ла ҡабул итеп алығыҙ.
-Бына күркәм сарабыҙ аҙағына ла яҡынлашты. Хөрмәтле, Гөлнара Дамир ҡыҙы һеҙгә шундай онотолмаҫлыҡ минуттар бүләк иткәнегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Беҙ ошондай матурлыҡҡа, әҙәбиәткә ғашиҡ кешеләр менән аралашыуыбыҙға бик шатбыҙ. Сәләмәтлек, оҙон ғүмер теләп хушлашабыҙ. Күңелегеҙҙә илһамлы ижад ҡомары һүрелмәһен, ҡәләмегеҙ үткер, фекерегеҙ тос булһын.

(Сәхнәләштереү өсөн)

**Автор:** Беҙҙең малайҙарҙың, ҡояш ҡыҙҙырып, тау баштары ҡарҙан әрселә башлау менән уҡыу ҡайғыһы китә. Мәктәптән ҡайталар ҙа, портфелдәрен ырғытып, унан-бынан ғына ҡапҡылай һалып, тауға ашығалар. Ҡараңғы төшкәнсе туп һуғалар, йүгерәләр, уйнайҙар. Ҡайткас, әсәйҙең һуҡраныуы аҫтында йыуынып, ас ҡорһаҡтарын тултырып алалар ҙа, өйгә бирелгән эште эшләһәләр эшләйҙәр, эшләмәһәләр юҡ, әүен баҙарына китәләр.

Бөгөн дә дәрескә бөтөнләй әҙерләнмәй Искәндәр. Әллә ни шәп уҡымаһа ла, '"ике"ле алғыһы килмәй, шуға йоҡонан торғас та портфеленә китап тултырып, ике пәрәник һалып алды ла мәктәпкә ашыҡты. Тиҙерәк берәйһенән өйгә эште күсерә һалырға кәрәк ине малайға.

-Оо, Марат менән Әсҡәт тә килгән, Сәләм, егеттәр! тәәәк, дәрес башланғансы өйгә эштәрҙе әҙерләп өлгөрөр кәрәк. Математиканан 132-се күнегеү. Эй, Марат, матемдан өйгә эште эшләнеңме?

- Мин Әсҡәттән күсерҙем, Әсҡәт Әлфиәнән күсергән, ана сумканан ҡарап ал, миңә рус язды эшләр кәрәк.

(сумканан дәфтәр алып)

-Ҡайҙа бында матем, мына, хәҙер тиҙ генә күсерәйем дә.

(күсерә)

-Рус яздан нимә бирелгән? Эй, рәп-рәхәт. Нөктәләр урынына хәрефтәр ҡуйып ҡына яҙырға, (китабын алып эшләй.) Быныһы булды. Ыыы, башҡорт теле ҡалды. Малайҙар, башҡорт теленән ниндәй өйгә эш? Минең көндәлектә лә яҙылмаған ул, күсертегеҙ әле.

-Үҙең эшлә.

-Унда һөйләмдәр төҙөр кәрәк.

-Һөйләмдәр төҙөй белмәйһеңме ни?

-Эй, табылған икән аҡыллы баштар. Әлфиә, күсерт әле!

-Юҡ, үҙең эшләр кәрәк ине.

-Ах, һеҙ шулаймы әле? (Әлфиәнең сумкаһын тартып ала)

-Бир Әлфиәнең сумкаһын!

-Ха, ха, Әлфиәне яҡлаша, ул һинең кәләшеңме әлле?

-Эй һин,( ҡул ғына һелтәй)

-Тәәк, бик үк күп түгел икән, хәҙер күсереп бөтәм дә. Бына булды ла.

(Әлфиәгә кире бирә)

Ҡыңғырау шылтырай, уҡытыусы инә.

-һаумыһығыҙ, Хәлдәрегеҙ нисек? Класта бөтәһе лә бармы?

-Эйе

-Дәрескә әҙерһегеҙме?

-эйе

- Афариндар. Өйгә эште тикшерәбеҙ. Тәәк, беҙҙә иң әҙ билдәләре булғаны- Искәндәр, әйҙә Искәндәр, таҡта янына.

(эстән генә)

-Ярар әле күсереп өлгөргәнмен...Иң шәп уҡыусы Әлфиәнән күсергәс барыбер дөрөҫ буласаҡ.
Таҡта янына сыға ла уҡый башлай.
"Минең яратҡан шөғөлдәрем - сигеү, һүрәт төшөрөү, бейеү. Әсәйемә һауыт- һаба йыуышам, бешеренергә ярҙам итәм..."
Тирә-яҡтан хихылдашҡан тауыштар ишетелә. Иң һәйбәт уҡыусынан күсергәс ни, хата булыуына шикләнмәй, артабан уҡый: "Буш ваҡытта ҡурсаҡтарыма кейем тегәм..."
Көлөү көсәйгәндән-көсәйә, һәр һүҙен етди генә тыңлап торған Рәшиҙә Усмановна ла йылмайҙы. Аптырап, Әсләмгә ҡарай. Унынһы, ултырырға ишаралап, ҡул һелтәй. Әлфиәһе, "һиңә шул кәрәк!" тигәндәй, тел күрһәтә. Аптырап Маратҡа ҡарай.
- Үҙең тураһында хикәйә яҙырға ине бит, туңбаш! - тип бышылдай ул көлкө аралаш. Шунда ғына башына барып етте. Башын эйеп, парта артына ултыра.